# ХОҘАЙҘЫ ЭҘЛӘ ӘҘӘМ

Был доньяның, михнәттәре ямандыр,

Ҡайҙа барма, кеше һүҙе ялғандыр,

Эсеү, тартыу, тән яланғас һүгенеү,

Тамуҡ юлындағыларға һуң булыр шул үкенеү.

Иманы юҡ, хаҡ һүҙ бөтә алдауға юл,

Ата- әсәгә ихтирам юҡ, модала шул.

Көн дә кейем таптыра, ғәзиз балаһы.

Мәрхәмәтле, түҙә шуға Күк Алла Аллаһы.

Ямғыр яуһа, йәйғорҙо һин күрәһеңдер,

Төрлө төҫтә. Шул Хоҙайҙың мисәтелер.

Туфан Һыуы баҫкан Ерҙе, Хоҙай эше.

Ҡалған тере ,Нух пәйғәмбәр һигеҙ кеше.

Был Алла язаһы булған бер заман,

Һыуға тотҡан, килеп етте Ахры заман.

Утҡа тотор, был ҡәһәрле Ерҙе Аллам,

Тамуҡ уты мәңге була, бел һин балам.

Йәһәннәмдән, сығып булмаҫ , кемдәр инә,

Гонаһлы йән ыҙалана, ғазап сигә.

Был доньяла тәүбә ит һин Хоҙайыңа,

Тере Алла алыҫ түгел гел яныңда.

АМИН!